# КОМБИНАТ ТАРИХЫНАН

## ҺАНДАР ҺӨЙЛӘЙ

1980 йылда «Байрамғол» совхозы фермаларында һәм мал һимертеү майҙандарында 10309 баш һыйыр малы иҫәпләнә.

Унынсы биш йыллыҡ осоронда «Байрамғол» совхозы башҡа хужалыҡтарҙы тоҡомло малдар менән тәьмин итеүсе булып тора. Йыл һайын 700-1000 баш йәш һыйыр малы һата.

80-се йылдарҙа «Байрамғол» совхозы табындарында 1260 йылҡы булып, шуның 486-һы тай һәм ҡолон иҫәпләнә. Аттарҙың тоҡомон яҡшыртыу өсөн Ҡаҙағстандан «Джабе» тоҡомло йылҡылар һатып алына.

1990 йылдың 27 сентябрендә халыҡ депутаттарының район советы сессияһы ҡарары менән башҡорт телендә берләштерелгән ижтимағи-сәйәси гәзит ойошторола.

1991 йылда Урман машиналары төҙөү заводы үҙенең 10 йыллығын билдәләй.

1991 йылда Уральск ҡасабаһында ҡарттар йорто асыла.

1991 йылда Учалыла яҙыусылар ойошмаһы асыла.

1991 йылдың 10 октябрендә Өфөнөң «Нефтяник» һарайында халҡыбыҙҙың бөйөк улы Муса Лут улы Мортазиндың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған тантаналы йыйылыш үтте. Юбилей хөрмәтенә ҡаланың Социалистик урамына М. Мортазин исемен бирергә ҡарар сығарылды.

1992 йылда Учалы ауылында ике ҡатлы яңы китапхана файҙаланыуға тапшырылды.

1992 йылда атаҡлы йырсы Абдулла Солтановҡа Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы бирелә.

1992 йылда Өргөн ауылында ике ҡатлы мәҙәниәт йорто файҙаланыуға тапшырыла.

1991 йылда «Байрамғол» совхозында Гөлли Талипова һәр һыйырҙан 4246 кг, ә уның ҡыҙы Гөлгөнә Сәғитова 4103 кг һөт һауған.

1992 йылда беренсе тапҡыр ҙур һабантуй — Урал арты йәштәренең берлектәге бәйгеһе уҙғарылды.

1992 йылда «Өлкәр» альманахы донъя күрҙе.

1992 йылда телерадиостудияның муниципаль редакцияһы ойошторолдо.